Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
«Башкирская гимназия № 25» городского округа город Салават
Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ БГ № 25 г.Салавата
__________ Г.Ш.Давлеткулова
Приказ от «29» августа 2019 г. № 323

**Рабочая программа**
**по учебному предмету «Литературное чтение на родном (башкирском) языке»**
**уровень образования: начальное общее**
**срок реализации: 4 года**
**количество часов в неделю: 2ч.**

**Программа составлена на основе примерной программы для общеобразовательных башкирских школ**
**Учебник:** Башкирский язык, Уфа: Китап; Ф.Ш.Сынбулатова, А.Т.Мавлиярова, М.С.Давлетшина.

Составители:
МО учителей начальных классов

СОГЛАСОВАНО
Протокол заседания МО
учителей начальных классов
от «28» августа 2019г. №01

СОГЛАСОВАНО
Заместитель директора по УВР
__________ Сайгафарова Л.А.
«29» августа 2019г.

Салават
2019

## I.ПРЕДМЕТ ПРОГРАММАҺЫНЫҢ ПЛАНЛАШТЫРҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕН ҮҘЛӘШТЕРЕҮ

1-се класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:
Грамотаға өйрәтеү процесында уҡыусы өйрәнергә тейеш:

I кимәл. Балала шәхси сифаттар үçтерергә:

-Уҡыусы статусын ҡабул итергә, уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнергә.
-Тыуған илгә, ергә, телгә, яҡын кешеләргә һөйөү тәрбиәләргә.
-Эшләгән эштәр, ҡылыҡ – фиғел өсөн яуаплылыҡ тойорға.
-Һау – сәләмәт йәшәйеш булдырырға.

II кимәл. Предмет буйынса белем алырға:

-тел берәмектәрен айыра белергә (һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, өн, хәреф);
-һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләмде график – символик тамға ярҙамында тамғаларға;
-уҡырға (минутына 30-35 һүҙ);
-һүҙ,һөйләм, текст уҡырға;

III кимәл. Универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәнергә:

- уҡытыусыны тыңларға, уның әйткәнен ишетергә;
- өндәрҙе әйтергә, тыңларға, сағыштырырға, анализларға;
- уҡытыусыға һорау бирергә, белешмә алырға;
- икешәрләп йәки төркөмләп класташтары менән эшләргә;
- диалог барышында һөйләшеүҙә ҡатнашырға, уның темаһын күҙ уңында тотоп, үҙ фекерен әйтергә, кешенекен тыңларға;
- дәрестең темаһына ярашлы уҡыу мәсьәләһе ҡуйырға, уны сисеү маҡсатында тикшереү эшендә әүҙем ҡатнашырға;
- график – символик һыҙмаларҙы таныырға:һүҙҙең өн (хәреф) моделен,һөйләмдең һыҙмаһын төҙөргә һәм уҡырға;
- уҡыу һәм яҙыуҙы мәғлүмәт, белем алыу мөмкинселеге итеп ҡулланырға.

Грамотаға өйрәтеү осоронда түбәндәге *мәсьәләләр*ҡуйыла:

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу; телмәр һәм һөйләү сараларының йәшәйештәге әһәмиәтенә төшөнөү;
- уҡыу материалы, төрлө әҙәби әçәрҙәр йөкмәткеһе нигеҙендә тирә-яҡ мөхитте, йәмғиәтте өйрәнеү кешене таныпбелеү, белем алыу;

- уҡыуға ҡыҙыҡһыныу, әүҙемлек тәрбиәләү, грамотаға өйрәтеү осоронда универсаль уҡыу эш алымдарына өйрәтеү;
- башҡорт грамотаһына өйрәтеүҙе рус теле һәм уҡыу, тирә- яҡ тәбиғәтте өйрәнеү, һынлы сәнғәт һ.б. предметтар менән тығыҙ бәйләнештә (интеграция) алып барыу.
Уҡытыу һөҙөмтәһендә башланғыс мәктәптә балала артабан белем алырға әҙерлек, кәрәкле әҙәби үҫеш кимәле булдырыуға теләк уянасаҡ. Был түбәндәге күнекмәләрҙе булдырыуҙы күҙаллай:
• тирә-йүнде өйрәнгәндә туған тел дәресенең тотҡан урынын һәм ролен төшөнөү, уҡыуҙың мәҙәниәтле кеше тәрбиәләүҙәге ролен аңлау, шәхси сифаттарҙы һәм социаль ҡиммәттәрҙе тәрбиәләү;
• әҙәбиәттең дөйөм кешелек сифаттары тәрбиәләүҙәге әһәмиәтен аңлау;
• әҙәби текстар өҫтөндә эстетика һәм әхлаҡ күҙлегенән сығып эш итеү. Әҙәбиәттең, сәнғәттең бер төрө икәненә төшөнөү, аңлау;
• әҙәби жанрҙы билдәләү, геройға характеристика биреү өсөн анализлау, сағыштырыу алымдарын ҡулланыу; тексты һөйләй белеү күнекмәләренә эйә булыу;
• үҙенә кәрәкле информацияны әҙәби, фәнни-популяр, өйрәтеү текстарынан таба белеү;
• энциклопедик, белешмә баҫмалар менән эшләү күнекмәләренә эйә булыу.
- һөйләү һәм яҙма телмәр курсының төп *маҡсаты* – уҡыусыны тәү башлап уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү. Ошо процесс нигеҙендә бала уҡыу эшмәкәрлеген үҙләштерә башлай, белем алыу оҫталығына өйрәнә.

Башланғыс класс уҡытыусыһы үҙ алдына баланы өс кимәлдә үҫтереү бурысын аныҡҡуя.

Шәхси үҫеш кимәле

Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.
Был йүнәлештә башланғыс мәктәп уҡыусыһына уҡыуҙың һәм белем алыуҙың мөһимлеген, үҫеш өсөн кәрәклеген аңлатырға, китап уҡырға ғәҙәтләнеү, ҡыҙыҡһыныу теләген булдырырға; үҙ-үҙенде һәм тормошто аңлауҙы сығанаҡ итеп ҡабул итергә, тарихи-мәҙәни ваҡиғаларҙы, кешелек ҡиммәттәре менән әҙәбиәттәге айырым сәнғәт төрө икәнен белергә өйрәтергә кәрәк. Әҙәби әҫәрҙәрҙе тулыһынса һәм эмоциональ ҡабул итеү үҙ фекеренде булдырыуға һәм әңгәмәсенекен хөрмәт итеү талаптарына яуап бирә.

Метапредмет кимәле

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, регулятив һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡыуға, белем алырға өйрәтеү.

Предмет-ара һөҙөмтәләр түбәндәге талаптарҙан тора:

- әҙәбиәттән, фәнни-популяр мәҡәләләрҙән, белемде арттырырҙай материалдарҙы, кәрәкле мәғлүмәтте таба алыу;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау (тексты өлөштәргә бүлеү, план төҙөү, тасуирлау сараларын таба белеү) һәм текстың төп фекерен асыҡлау;
- үҙеңдең фекереңде, уйыңды әңгәмәсеңә еткерә алыу;
- тирә-йүн, тәбиғәт менән гармонияла йәшәү ҡағиҙәләрен, ысулдарын үҙләштереү;
- йәмғиәттәге тәртип һәм әхлаҡҡағиҙәләрен белеү;
- аңлы анализлау эшмәкәрлеген булдырыу;
- төркөмдәрҙә эшләүҙең әһәмиәтен аңлау һәм уларҙа эшләү тәртибен үҙләштереү.

Предмет кимәле

Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны анализлау һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

Предметты өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре түбәндәгеләр:

- компетентлы уҡыуҙы формалаштырыу;
- уҡыу техникаһын үҙләштереү;
- уҡылған йәки тыңланган әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлау алымдарына эйә булыу;
- интерпретацияның төп элементтарын үҙләштереү;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр уҡыу текстарын анализлау һәм үҙгәртеү күнекмәләренә эйә булыу;
- үҙеңде ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтте үҙ аллы һайлай алыу;
- һүҙлектәр, белешмәләр менән эш итә белеү;
- үҙеңде ижади эшмәкәрлеккә һәләтле, белемле китап уҡыусы итеп тойоу;
- монологтар төҙөү, текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү;
- һүрәтләү, хикәйәләү, хөкөмләү элементтарын индереп, бәләкәй текстар төҙөү;
- шиғырҙарҙы яттан һөйләү һәм таныш булмаған аудиторияла сығыш яһау күнекмәләренә эйә булыу.

2-се класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:
- әҙәби һөйләү нормаларын күҙәтеп, йылдан-йыл аңлы, дөрөҫ, тасуири (пауза, логик баҫым, тон, темпты күҙәтеү) уҡый белергә;
- әҫәрҙе эстән аңлы уҡый белергә (уҡыу тиҙлеге иҫәпкә алынмай);
- китаптың өлөштәрен, йәғни титул битен,йөкмәткеһен, инеш һүҙен, йомғаҡ һүҙен табыу; һылтанмаһын, аннотацияһын айыра белергә;
- үҙ аллы төҙөлгән планға таянып, әҫәрҙең йөкмәткеһен ентекләп, ҡыҫҡартып йәки һайлап, ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға;
- уҡыған әҫәрҙең темаһын һәм төп фекерен билдәләргә;
- уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләргә; әҫәрҙең исемен, авторын белергә; авторҙың уй-фекерен асыҡларға;
- уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен тулы, ҡыҫҡартып, һайлап һәм ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға (1-2 бит);
- уҡылған әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан тамамланған өлөштәргә үҙ аллы бүлергә, улар араһынан төп фекерҙе белдергәнен таба белергә; хикәйәнең, мәҡәләнең планын төҙөргә;
- уҡылған текстың йөкмәткеһенә нигеҙләнеп, ҡыҫҡа хикәйәләр төҙөргә, яҙырға, ижади эштәр башҡарырға, автор ҡарашынан сығып, уның төп геройына баһа бирә белергә;
- әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә уҡыусының шәхси уй-фекерен, карашын белергә;
- әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылығын, холҡон, тәртибен, тойғоһон, уй-фекерен аңларға, уларҙы бер-береһе менән сағыштырырға, үҙ мөнәсәбәтеңде белдерергә, ҡылыҡһырлама төҙөй белергә;
- шиғырҙарҙы, ауыҙ-тел ижады өлгөләрен тасуири, яттан һөйләй белергә;
- бирелгән тема буйынса тасуирлау һәм фараз итеү элементтарын индереп, телдән хикәйәләр төҙөй белергә;
- фольклор әҫәрҙәренә миҫалдар килтерә белергә (әкиәттәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр);
- әҙәби әҫәрҙең, халыҡ ижадының ҡайһы бер жанрҙарының (хикәйә, шиғыр, мәҫәл, әкиәт, йыр, мәҡәл, йомаҡ, көләмәс, һынамыш) һәм уларҙың үҙенсәлектәрен ғәмәли айыра белергә;
- төрлө тематикаға уҡылған әҫәрҙәргә миҫалдар килтерә белергә.
-уҡыусыларҙа аңлы, йүгерек, тасуири уҡыу күнекмәләре булдырырға, үҙ аллы укыу тәжрибәһен формалаштырырға;
-текст һәм китап менән эшләү оҫталығын тәрбиәләргә, уҡыусыларҙа китап уҡырға ынтылыш тыуҙырырға, уларҙа дөрөҫ итеп китап һайларға өйрәтергә;

-һүҙ сәнғәтенә дөрөҫ мөнәсәбәт формалаштырырға, әҙәби текстар аша әхлаҡи тәжрибәһен байытыу, ижади һәләттәрен үҫтереү.
“Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре” бүлеге түбәндәге процестарҙы үҙ эсенә ала:

Тыңлау (аудирование) – телдән әйтелгән информацияны тыңлау һәм мәғәнәһенә төшөнә барыу бер ваҡыт эсендә башҡарыла: уҡыусы һөйләгәнде тыңлай, һөйләүсенең фекеренә төшөнә, телмәре аша уның мөнәсәбәтен, мәғәнәә биҙәктәрен билдәләй, йөкмәткеһенә ҡарай үҙ яуабын әҙерләй, ҡылығын, тәртибен планлаштыра.

Уҡыу – уҡылған текстан үҙеңә кәрәкле мәғлүмәт, белем алыу, текстың йөкмәткеһен тәрән аңлау. Уға үҙҡарашыңды булырыу. Төрлө күләмдәге, жанрҙағы әҙәби әҫәрҙәрҙе үҙ аллы аңлап уҡыу; уҡыу маҡсатын, уҡыу төрҙәрен билдәләү; тасуири уҡыу сараларын ҡулланыптөрлө маҡсатты күҙ уңында тотҡан әҙәби текстарҙы дөрөҫ, аңлап уҡыу.

Һөйләү (аралашыу мәҙәниәте). Һөйләү телмәре ни тиклем үҫешкәнерәк, камилыраҡ булһа, кеше үҙ фекерен әңгәмәсеһенә шул тиклем еңелерәк еткерә һәм башҡалаҙы ла тиҙерәе аңлай. Уҡылған текстар ярҙамында диалог ҡорорға, һөйләү этикетын ҡулланып монолог төҙөргә, тормоштан алған тәьҫораттарыңды белдерергә, әҫәрҙә яҙыусының телмәр үҙенсәлеген билдәләргә һәм уның фекерен асыҡларға, текстың төп фекерен табырға тырышыу ҙа һөйләү телмәренең үҫешенә булышлыҡ итә.

Яҙыу (яҙыу телмәре мәҙәниәте, яҙыу телмәренә эйә булыу). Үҙең ишеткән, күргән, уҡыған, кисергән хәл-ваҡиғаларҙы, дөйөм алғанда, фекерҙәреңде билдәле маҡсатта тулы, дөрөҫ, эҙмә-эҙ һәм бәйләнешле итеп яҙа белеү.
Яҙыу телмәрен үҫтереү уҡыусыларҙа түбәндәге күнекмәләрҙе үҫтереүҙе күҙ уңында тота:
-билдәле бер маҡсатты күҙ уңында тотоп, төрлө жанрҙарҙа (хикәйәләү, һүрәтләү, хөкөм йөрөтөү) яҙа белеү;
-йөкмәткене өҫтәлмә материал менән байытып яҙыу;
-үҙеңдең хикәйәңде булдырыу (мәҫәлән, картина буйынса);
-баһалама, характеристика яҙыу.

“Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре” бүлеге тыңлау, һөйләү, яҙыу һәм уҡыу процестарының үҫешен тәьмин итеп, мәҙәниәтле аралашык күнекмәләрен барлыҡҡа килтерә. Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә булып, бер-береһенә туранан-тура йоғонто яһай. Шунлыҡтан тыңлау, һөйләү, яҙыу һәм уҡыу һәләтлектәрен комплекслы үҫтерергә кәрәк.

“Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре” бүлеге төрлө кимәлдәге текст өҫтөндә эшләү күнекмәләрен барлыҡҡа килтереүҙе лә үҙ эсенә ала. Был эш түбәндәге анализлау оҫталыҡтарын барлыҡҡа килтереүҙә күҙаллай:

-әҙәби әҫәрҙәрҙең, фәнни-популяр мәҡәләләрҙең һүрәтләү-тасуирлау сараларын, йөкиәткеһен,маҡсатын, тәғәнләйешенә ярашлы һайлау һәм дөрөҫҡулланыу;
-автор тарафынан тәҡдим ителгән тормош үҙенсәлеген күрә башлау; әҙәби, фәнни-популяр текстар араһында сәбәп-һөҙөмтә бәйләнешен булдырыу, айырмалығын күрә белеү;
-автор позицияһын, ҡарашын, үҙсәнлеген аңлау; текстың төп фекерен айыра белеү (уҡытыусы ярҙамында).

"Китап уҡыу даирәһе" бүлегендә балалар өсөн тәғәйенләнгән материалдарҙан йөкмәткеһен һайлау мөмкинлеге принциптары билдәләнә. Бирелгән принциптар уҡыусыларҙа үҙе уҡырға теләгән әҫәрҙе һайлау, ғөмүмән, китапты ихлас һәм даими уҡырға ғәҙәтләндереү, үҙ аллы уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереү, балаларҙа әҙәбиәт донъяһына, тексты уҡырға һөйөү тәрбиәләү; төрлө китаптарҙан үҙ эсенә әхлаҡи-эстетик ҡиммәттәрҙе алған текстарҙы һайлай алыу күнекмәләрен булдырыу ҡаралған.

"Уҡыусыларҙың ижади эшмәкәрлеген үҫтереү" (әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә) бүлеге әҙәби белем биреү йөкмәткеһенең төп йүнәлеше булып тора. Ижади эшмәкәрлек тәжрибәһе уҡыусының уҡыу һәм яҙыу телмәренә үтеп инә, ә был, үҙ сиратында, уҡыусыларға алған белемдәрен файҙаланып, үҙ аллы ижад итергә мөмкинлек тыуҙыра. Артабан был бүлектә төрлө формалы текстар барлыҡҡа килтереүгә, мәғәнәһен аңлата белеүгә, уҡылған әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә төрлө һүрәтләү сараларына, һөйләү формалары ҡулланып, үҙеңдең әҫәрҙәреңде ижад итеүгә лә иғтибар бирелә.

"Әҙәбиәт ғилеме тураһында төшөнсә биреү" бүлеге уҡыусыларҙы тәү башлап әҙәбиәт ғилеме менән таныштыра. Был инде әҙәби төр һәм жанр үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу, уларҙы таный, айыра белеүҙе; телдең һүрәтләү, тасуирлау сараларын аңлы ҡабул итеүҙе күҙаллай.

Башланғыс мәктәптә уҡыу предметы булараҡ әҙәби уҡыу дәрестәре белем биреүгә генә түгел, ә тәрбиәүи ҡиммәттәргә лә ҙур әһәмиәт бирә. Туған тел дәрестәрендә уҡыусылаы тәбиғәтте күҙәтеү, уны һаҡлау һәм шулай уҡ әҙәп, әхләҡ, мәҙәниәтле аралашыу мәсьәләләренә бағышланған әҫәрҙәр менән танышалар. Төрлө әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыу, ҡабул итеү барышында башланғыс мәктәп уҡыусыларында белем алыу менән бергә туған тәбиғәткә һөйөү, һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләнә. Кешкләрҙең уй-фекерҙәрен, ҡылыҡтарын аңлау һәм шунан сығып үҙҙәрендә лә ыңғай сифаттарҙы үҫтереү хуплана.

Әҙәби уҡыу дәрестәре, сәнғәт менән таныштырыуҙың, уға һөйөү тәрбиәләүҙең бер төрө булараҡ, уҡыусыларҙы үҙ халҡының һәм милләтенең эстетик-әхлаҡи ҡиммәттәре менән танышытырыуҙы һәм һәр ҡайһыһында юғары

әхлаҡи һыҙаттарҙы:матурлыҡты күрә, баһалай һәм ҡабул итә алырҙай тойғолар тәрбиәләүҙе; кешелектең һәм үҙ милләтенең тәрбиәһенә тура килерҙәй ыңғай сифаттарҙы формалаштырыуҙы күҙаллай.

Әҙәби уҡыу дәрестәрендә уҡыу техникаһы, уҡыу сифаты, аңлап уҡыу күнекмәләрен булдырыу дауам итә. Әҙәби әҫәрҙе уҡығандан һуң анализлап, уҡыусы яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, дөрөҫлөк, ғәҙеллек, тоғролоҡ, дуҫлыҡ тураһында уйлана. Шулай уҡ туған тел дәрестәрендә әҙәби әҫәрҙә һ-рәтләнгән күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы, образдарҙы ысын күңелдән ҡабул итеү, шуның менән уҡыусылар күңеленә эмоциональ-эстетик йоғонто яһау мөһим роль уйнай. Әҙәби белем биреү сиктәрендә тормошҡа ашырылған рухи-әхлаҡи тәрбиә һәм белем биреү уҡыусыла Тыуған илгә, кешеләргә ҡарата булған ыңғай сифаттарҙы барлыҡҡа килтерә, формалаштыра.

Туған тел предметының дөйөм (метапредмет) һөҙөмтәләре булып, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген (УУЭ) формалаштырыу тора.

Көйләүсе УУЭ (регулятивные УУД):

- дәрестең темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы әйтә белеү;
- уҡытыусы менән берлектә уҡыу программаһын сисеүҙең планын төҙөү;
- ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү өсөн планды тормошҡа ашарыу, кәрәк осраҡта үҙеңдең эшмәкәрлегеңә төҙәтмәләр индереү;
- уҡытыусы менән берлектә баһалау кретерийҙарын билдәләү һәм шуға ярашлы үҙеңдең һәм иптәштәреңдең эшенә баһа бирә белеү.

Танып белеү УУЭ (познавательные УУД):

- текстағы мәғлүмәттең бөтөн төрҙәрен дә иҫәпкә алыу;
- уҡыу төрҙәрен маҡсатҡа ярашлы файҙаланыу: текст менән танышыу өсөн уҡыу, күҙ йүгертеп сығыу, мәғлүмәт алыу өсөн ентекләп уҡыу;
- төрлө формала бирелгән мәглүмәтте таба белеү;
- мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү;
- һүҙлектәр, белешмә материал менән файҙалана белеү;
- анализлай һәм синтезлай белеү;
- сәбәп- һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү;
- фекерләй белеү.

Коммуникатив УУЭ (коммуникативные УУД):

- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү һәм яҙма формала бирә белеү;

- телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫҡулланыу, телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
- үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
- башҡаларҙы ла ишетә һэм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдеңҡарашыңды үҙгәртә алыу;
- дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү;

Уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау

Туған телдән ағымдағы һәм семестр аҙағында, шулай уҡҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау эштәре үткәрелә.Уларҙың йөкмәткеһе һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлығы кимәленән , шулай уҡ һәр класс уҡыусыларының үҙенсәлектәренән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә унының өлөшөн генә файҙалана ала.Программа материалының үҙләштереү кимәлен уҡыусыларҙың телдән яуаптарына һәм өйрәтеүсе яҙма эштәргә ҡарап һәр көн билдәләй алыу мөмкиелеген иҫәпкә алғанда , әҙәби уҡыуҙан яҙма эштәрҙе баҫма дәфтәрҙә лә эшләтә ала.

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, уҡыусыларҙан яуап алыу, уларҙың белемдәрен, белеүҙәрен һәм күнекмәләрен тикшереү, иҫәпкә алыу, шуның менән бергә, алған белемдәргә таянып, телмәренә,күренештәренә аңлатма бирергә өйрәтеү алымдарының береһе иҫәпләнә.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге критерийҙар менән эш ителергә тейеш:
яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;
үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;
- яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыу техникаһын тикшереү.

-Ижекләп уҡыу күнекмәләрен формалаштырыу. Уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе тотош уҡыу.
-Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм ҡыҫҡа текстарҙы аңлы уҡыу. Дөрөҫ интонация һәм пауза менән уҡыу. Аңлы һәм тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.
-Ҡысҡырып уҡыу.
-Ижекләп уҡыуҙан уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә тотош уҡыуға күсеү. Уҡыу тиҙлеген эҙмә-эҙлекле үҫтереү.

-Эстән уҡыу.
-Эстән уҡығанда әҫәрҙең мәғәнәһен аңлау. Уҡыуҙың төрөн билдәләү. Текстан кәрәкле информация таба белеү.

3 класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:
- әҙәби һөйләү нормаларын күҙәтеп, йылдан-йыл аңлы, дөрөҫ, тасуири (пауза, логик баҫым, тон, темпты күҙәтеү) уҡый белергә;
- әҫәрҙе эстән аңлы уҡый белергә (уҡыу тиҙлеге иҫәпкә алынмай);
- китаптың өлөштәрен, йәғни титул битен,йөкмәткеһен, инеш һүҙен, йомғаҡ һүҙен табыу; һылтанмаһын, аннотацияһын айыра белергә;
- үҙ аллы төҙөлгән планға таянып, әҫәрҙең йөкмәткеһен ентекләп, ҡыҫҡартып йәки һайлап, ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға;
- уҡыған әҫәрҙең темаһын һәм төп фекерен билдәләргә;
- уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләргә; әҫәрҙең исемен, авторын белергә; авторҙың уй-фекерен асыҡларға;
- уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен тулы, ҡыҫҡартып, һайлап һәм ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға (1-3 бит);
- уҡылған әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан тамамланған өлөштәргә үҙ аллы бүлергә, улар араһынан төп фекерҙе белдергәнен таба белергә; хикәйәнең, мәҡәләнең планын төҙөргә;
- уҡылған тексттың йөкмәткеһенә нигеҙләнеп, ҡыҫҡа хикәйәләр төҙөргә, яҙырға, ижади эштәр башҡарырға, автор ҡарашынан сығып, уның төп геройына баһа бирә белергә;
- әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә уҡыусының шәхси уй-фекерен, карашын белергә;
- әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылығын, холҡон, тәртибен, тойғоһон, уй-фекерен аңларға, уларҙы бер-береһе менән сағыштырырға, үҙ мөнәсәбәтеңде белдерергә, ҡылыҡһырлама төҙөй белергә;
- шиғырҙарҙы, ауыҙ-тел ижады өлгөләрен тасуири, яттан һөйләй белергә;
- бирелгән тема буйынса тасуирлау һәм фараз итеү элементтарын индереп, телдән хикәйәләр төҙөй белергә;
- фольклор әҫәрҙәренә миҫалдар килтерә белергә (әкиәттәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр);
- әҙәби әҫәрҙең, халыҡ ижадының ҡайһы бер жанрҙарының (хикәйә, шиғыр, мәҫәл, әкиәт, йыр, мәҡәл, йомаҡ, көләмәс, һынамыш) һәм уларҙың үҙенсәлектәрен ғәмәли айыра белергә;
- төрлө тематикаға уҡылған әҫәрҙәргә миҫалдар килтерә белергә.
Балаларҙы әҙерләү кимәленең төп талаптары. Шәхси сифаттарҙы үҫтереү.Үҙ аллы эш итеү, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарау;

-Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу;
-Мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына ҡарата һаҡсыл булыу;
-Тыуған илде яратыу, ерҙе, телде һаҡлау;
-Һаулыҡты нығытыу.
-Ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булыу, файҙалы ял итеү;
-Кеше менән аралашыу этикетын үҙләштереү.
Предмет һөҙөмтәләре.
- уҡыған йәки һөйләгән, үҙе уҡыған тексты аңлай алыу.
-Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм, билдәле ситуация буйынса әңгәмәлә ҡатнаша алыу.
-Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу; логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү.
-Һүҙ төркөмдәрен айыра белеү.
Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү.
-Үҙ аллы белем алыу, мәғлүмәт йыйыу һәм уларҙы ҡуллана белеү.
-Дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләү; дәрескә маҡсат ҡуйыу һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белеү һәм тормошҡа ашырыу, эште дөрөҫ планлаштырыу, эҙләнеү эше алып барыу.
-Эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләү.
--Тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшеү, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштереү.
Эшләгән эштәрен дөрөҫ баһалау һәм кәрәк саҡта төҙәтмәләр индереү.
«Әҙәби уҡыу » курсының предмет һөҙөмтәләре булып түбәндәге күнекмәләрҙең формалашыуы тора:
- әҙәбиәттең дөйөм һәм мили мәҙәниәтте сағылдырыусы күренеш булыуын, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе, традицияларҙы һаҡлау һәм быуындан быуынға еткереү сараһы икәнлеген аңлау;
- уҡыуҙың шәхси үҫеш өсөн әһәмиәтен аңлау, Тыуған ил һәм уның кешеләре, тирә – яҡ донъя тураһында хәбәрҙар булыу;
- уҡытыусы һәм уҡыусылар башҡарыуында текстарҙы тыңлап ҡабул итә белеү;
- аңлап , дөрөҫ, тасуири итеп ҡысҡырып уҡыу;
- тексттың исеменә, авторҙың фамилияһына, иллюстрацияларға, терәк һүҙҙәргә ҡарап уның йөкмәткеһен күҙаллау;
- таныш булмаған тексты эстән уҡыу, һүҙлек эшен үткәрә белеү;
- тексты өлөштәргә бүлеү, ябай план төҙөү;

- текстың төп фекерен үҙ аллы билдәләй белеү;
- геройға ҡылыҡһырлама бирә белеү;
-текстан геройҙы ҡылыҡһырлаусы материалды таба белеү;
- тексты тулыһынса һәм һайланма һөйләй белеү;
- телдән һәм яҙма һүрәтләй белеү;
- уҡыу барышында картиналарҙы күҙ алдына килтереп һөйләй белеү;
- уҡылғанға ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү, нимәнең ни өсөн оҡшағанын аңлата алыу;
- асыҡланған билдәләре буйынса әҫәрҙе хикәйә, повесть, пьеса жанрҙарына бүлә белеү;
- проза әҫәрендә геройҙы, авторҙы һәм һөйләүсене айыра белеү;
- нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙы, эпитеттарҙы, йәнләндереүҙәрҙе күрә белеү;
- уҡылған әҫәрҙәрҙә авторҙы, геройҙарҙы һәм әҫәрҙең исемен дөрөҫ атау.

Башланғыс класта уҡыу дәрестәренең маҡсаты- балаларҙы нәфис әҙәбиәт уҡырға өйрәтеү, уны төп мәктәптә системалы өйрәнеүгә әҙерләү, уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу, грамоталы уҡыусы тәрбиәләүҙең нигеҙен булдырыу. Грамоталы уҡыусы – ул уҡыу техникаһын белгән, уҡығанын аңлаған, китаптарҙы белгән һәм уларҙы донъяны танып - белеү сараһы итеп таныған кеше.

“Әҙәби” уҡыу предметының дөйөм (метапредмет) һөҙөмтәләре булып, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген (УУЭ) формалаштырыу тора.

Көйләүсе УУЭ (регулятивные УУД):

дәрестең темаһын һәм маҡсатын үз аллы әйтә белеү;

уҡытыусы менән берлектә уҡыу программаһын сисеүҙең планын төҙөү;

ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү өсөн планды тормошҡа ашарыу, кәрәк осраҡта үҙеңдең эшмәкәрлегеңә төҙәтмәләр индереү;

уҡытыусы менән берлектә баһалау кретерийҙарын билдәләү һәм шуға ярашлы үҙеңдең һәм иптәштәреңдең эшенә баһа бирә белеү.

Танып белеү УУЭ (познавательные УУД):
- текстағы мәғлүмәттең бөтөн төрҙәрен дә иҫәпкә алыу;
- уҡыу төрҙәрен маҡсатҡа ярашлы файҙаланыу: текст менән танышыу өсөн уҡыу, күҙ йүгертеп сығыу, мәғлүмәт алыу өсөн ентекләп уҡыу;

- төрлө формала бирелгән мәглүмәтте таба белеү;
- мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү;
- һүҙлектәр, белешмә материал менән файҙалана белеү;
- анализлай һәм синтезлай белеү;
- сәбәп- һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү;
- фекерләй белеү.

Коммуникатив УУЭ (коммуникативные УУД):
- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү һәм яҙма формала бирә белеү;
- телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫҡулланыу, телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
- үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
- башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдеңҡарашыңды үҙгәртә алыу;
- дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү;

4 класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:
- әҙәби һөйләү нормаларын күҙәтеп, йылдан-йыл аңлы, дөрөҫ, тасуири (пауза, логик баҫым, тон, темпты күҙәтеү) уҡый белергә;
- әҫәрҙе эстән аңлы уҡый белергә (уҡыу тиҙлеге иҫәпкә алынмай);
- китаптың өлөштәрен, йәғни титул битен,йөкмәткеһен, инеш һүҙен, йомғаҡ һүҙен табыу; һылтанмаһын, аннотацияһын айыра белергә;
- үҙ аллы төҙөлгән планға таянып, әҫәрҙең йөкмәткеһен ентекләп, ҡыҫҡартып йәки һайлап, ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға;
- уҡыған әҫәрҙең темаһын һәм төп фекерен билдәләргә;
- уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләргә; әҫәрҙең исемен, авторын белергә; авторҙың уй-фекерен асыҡларға;
- уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен тулы, ҡыҫҡартып, һайлап һәм ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға (1-5 бит);
- уҡылған әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан тамамланған өлөштәргә үҙ аллы бүлергә, улар араһынан төп фекерҙе белдергәнен таба белергә; хикәйәнең, мәҡәләнең планын төҙөргә;

- уҡылған текстың йөкмәткеһенә нигеҙләнеп, ҡыҫҡа хикәйәләр төҙөргә, яҙырға, ижади эштәр башҡарырға, автор ҡарашынан сығып, уның төп геройына баһа бирә белергә;
- әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә уҡыусының шәхси уй-фекерен, карашын белергә;
- әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылығын, холҡон, тәртибен, тойғоһон, уй-фекерен аңларға, уларҙы бер-береһе менән сағыштырырға, үҙ мөнәсәбәтеңде белдерергә, ҡылыҡһырлама төҙөй белергә;
- шиғырҙарҙы, ауыҙ-тел ижады өлгөләрен тасуири, яттан һөйләй белергә;
- бирелгән тема буйынса тасуирлау һәм фараз итеү элементтарын индереп, телдән хикәйәләр төҙөй белергә;
- фольклор әҫәрҙәренә миҫалдар килтерә белергә (әкиәттәр, йомаҡтар, мәкәлдәр);
- әҙәби әҫәрҙең, халыҡ ижадының ҡайһы бер жанрҙарының (хикәйә, шиғыр, мәҫәл, әкиәт, йыр, мәҡәл, йомаҡ, көләмәс, һынамыш) һәм уларҙың үҙенсәлектәрен ғәмәли айыра белергә;
- төрлө тематикаға уҡылған әҫәрҙәргә миҫалдар килтерә белергә.

Дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләү; дәрескә маҡсат ҡуйыу һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белеү һәм эште дөрөҫ планлаштырыу, эҙләнеү эше алып барыу.
Эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләү.
Тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшеү, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштереү.
Эшләгән эштәрен дөрөҫ баһалау һәм кәрәк саҡта төҙәтмәләр индереү

«Әҙәби уҡыу » курсының предмет һөҙөмтәләре булып түбәндәге күнекмәләрҙең формалашыуы тора:
- әҙәбиәттең дөйөм һәм милли мәҙәниәтте сағылдырыусы күренеш булыуын, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе, традицияларҙы һаҡлау һәм быуындан быуынға еткереү сараһы икәнлеген аңлау;
- уҡыуҙың шәхси үҫеш өсөн әһәмиәтен аңлау, Тыуған ил һәм уның кешеләре, тирә – яҡ донъя тураһында хәбәрҙар булыу;
- уҡытыусы һәм уҡыусылар башҡарыуында текстарҙы тыңлап ҡабул итә белеү;
- аңлап , дөрөҫ, тасуири итеп ҡысҡырып уҡыу;
- текстың исеменә, авторҙың фамилияһына, иллюстрацияларға, терәк һүҙҙәргә ҡарап уның йөкмәткеһен күҙаллау;
- таныш булмаған тексты эстән уҡыу, һүҙлек эшен үткәрә белеү;
- тексты өлөштәргә бүлеү, ябай план төҙөү;
- текстың төп фекерен үҙ аллы билдәләй белеү;
- геройға ҡылыҡһырлама бирә белеү;

-текстан геройҙы ҡылыҡһырлаусы материалды таба белеү;
- тексты тулыһынса һәм һайланма һөйләй белеү;
- телдән һәм яҙма һүрәтләй белеү;
- уҡыу барышында картиналарҙы күҙ алдына килтереп һөйләй белеү;
- уҡылғанға ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү, нимәнең ни өсөн оҡшағанын аңлата алыу;
- асыҡланған билдәләре буйынса әҫәрҙе хикәйә, повесть, пьеса жанрҙарына бүлә белеү;
- проза әҫәрендә геройҙы, авторҙы һәм һөйләүсене айыра белеү;
- нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙы, эпитеттарҙы, йәнләндереүҙәрҙе күрә белеү;
- уҡылған әҫәрҙәрҙә авторҙы, геройҙарҙы һәм әҫәрҙең исемен дөрөҫ атау.

Башланғыс класта уҡыу дәрестәренең маҡсаты- балаларҙы нәфис әҙәбиәт уҡырға өйрәтеү, уны төп мәктәптә системалы өйрәнеүгә әҙерләү, уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу, грамоталы уҡыусы тәрбиәләүҙең нигеҙен булдырыу. Грамоталы уҡыусы – ул уҡыу техникаһын белгән, уҡығанын аңлаған, китаптарҙы белгән һәм уларҙы донъяны танып - белеү сараһы итеп таныған кеше.

“Әҙәби” уҡыу предметының дөйөм (метапредмет) һөҙөмтәләре булып, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген (УУЭ) формалаштырыу тора.

Көйләүсе УУЭ (регулятивные УУД):

дәрестең темаһын һәм маҡсатын үз аллы әйтә белеү;

уҡытыусы менән берлектә уҡыу программаһын сисеүҙең планын төҙөү;

ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү өсөн планды тормошҡа ашарыу, кәрәк осраҡта үҙеңдең эшмәкәрлегеңә төҙәтмәләр индереү;

уҡытыусы менән берлектә баһалау кретерийҙарын билдәләү һәм шуға ярашлы үҙеңдең һәм иптәштәреңдең эшенә баһа бирә белеү.

Танып белеү УУЭ (познавательные УУД):
- текстағы мәғлүмәттең бөтөн төрҙәрен дә иҫәпкә алыу;
- уҡыу төрҙәрен маҡсатҡа ярашлы файҙаланыу: текст менән танышыу өсөн уҡыу, күҙ йүгертеп сығыу, мәғлүмәт алыу өсөн ентекләп уҡыу;
- төрлө формала бирелгән мәглүмәтте таба белеү;
- мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү;
- һүҙлектәр, белешмә материал менән файҙалана белеү;

- анализлай һәм синтезлай белеү;
- сәбәп- һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү;
- фекерләй белеү.
Коммуникатив УУЭ (коммуникативные УУД):
- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү һәм яҙма формала бирә белеү;
- телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫҡулланыу, телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
- үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
- башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдеңҡарашыңды үҙгәртә алыу;
- дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү;

Шәхси сифаттарҙы үҫтереү.

1. Үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау;
2. Мәктәп һәм класс йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булыу;
3. Һаулыҡты нығытыу һәм һаҡлау;
4. Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу;
5. Тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белеү, уларҙы һаҡлау, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнеү, таратыу.

Предмет һөҙөмтәләре.

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү.
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү; диалогты дауам итеү.
3. Программала бирелгән шиғырҙарҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
4. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу.
5. Ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалары яҙыу; иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.
6. Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм класта шулар тураһында фекер алышыу (кластан тыш уҡыу күнекмәләре).

Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү.

1. Уҡыу процесына яуаплы ҡарау, маҡсат ҡуйыу, эште планлаштыра белеү, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.
2. Теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт туплау, эҙләнеү эше алып барыу, уның буйынса презентация эшләй белеү.
3. Мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булыу, үҙ фекерен яҡлағанда, уй-тойғоларын еткерә алырлыҡ аныҡ, эҙмә-эҙ бәйән итеү, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышыу, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белеү.
4. Билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштереү һәм телмәрҙә ҡуллана белеү.

## II.ПРЕДМЕТ БУЙЫНСА БАШЛАНҒЫС ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮҘЕҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Телмәр эшмәкәрлеге.Телмәр тураһында төшөнсә.Һөйләү телмәре һәм яҙыу телмәре; телмәрҙең ғәмәли ҡулланышы: мәғлүмәт биреү, аралашыу, мөнәсәбәт ҡороу.

*Тыңлау.* Әйткәнде, һөйләгәнде ишетеү, тыңлау һәм унан тейешле мәғлүмәтте айырып ала белеү. Һөйләнгән текстан төп фекерҙе аныҡлау. Кәрәкле уҡыу материалын иғтибарлы тыңлау, унда әйтелгәнгә ярашлы эш итеү.

*Уҡыу.* Хәреф таныу. Тәү башлап уҡып өйрәнеү. Һүҙҙәр, Һөйләмдәр, текст уҡыу. Аңлы уҡыу. Тасуири уҡыу. Уҡыу универсаль эш алымы, мәғлүмәт алыу ысулы.

*Һөйләү.* Аралашыу маҡсатына ярашлы итеп тел сараларын, формаларын (диалог, монолог, дискуссия) һайлау. Үҙ–ара һөйләшеү (диалог) ҡороу һәләтен камиллаштырыу.

Телмәр мәҙәниәте. Бер-береңә өндәшеү, һөйләшеү үҙенсәлектәре: уҡытыусы, класташтар, яҡын туғандар, таныш булмаған кешеләр менән; һөйләшеү урыны, ваҡыты менән бәйле ситуацияларҙа аралашыу. Телмәрҙең йөкмәткеһе һәм формаһы.

Телмәр ситуациялары: хәбәр итеү (иғлан), өндәшеү, саҡырыу, Һорау, үтенеү, бәхәс, әңгәмә (диалог) һ.б. Тел саралары: баҫым, тон, пауза, тауыш көсө, тауыш тембры, мимика, ишара.Әңгәмәсе менән аралашыу уңышлы булһын өсөн шарттар булдырыу, этикет ҡағиҙәләрен үтәү: кешенең әйткәндәрен хуплау, уның фекерен, тәҡдимдәрен иғтибар менән бүлдермәй тыңлау, ҡәтғи рәүештә уның әйткәненә ҡаршы сыҡмай – ҡабул итеү һәм үҙенең уйлағандарын бик итәғәтле итеп ҡыҫҡа ғына әйтеп биреү һ.б.; мәҙәниле аралашыу ҡағиҙәләрен үҙләштереү.
Телдең орфоэпик формалары (термин ҡулланмайынса – ҡайһы бер һүҙҙәрҙең әйтелеше).

Тел ғилеме.

Һүҙ тураһында башланғыс төшөнсәләр. Предмет һәм һүҙ.

Һүҙҙең исем атау функцияһы. Уның телмәрҙәге әһәмиәте. Кеше исеме, телмәрҙәге әһәмиәте. Кеше исемен, фамилияһын белдергән һүҙҙәр.

Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр.Һүҙбәйләнеш. Уларҙы график тамғалау.

Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Һүҙбәйләнеш. График тамғалау.

Һөйләм. Уның схемаһы. Һөйләм башы, аҙағы һәм уның аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау, өндәү).

Йыйнаҡ һәм киңәйтелгән һөйләмдәр. Һөйләмде тулыландырыу, һүҙ өҫтәү.

Текст. Уның мәғәнәһе, төп фекер. Уны тыңлау, һөйләү.

Ярҙамсы һүҙҙәр. Уларҙың һөйләмдәге әһәмиәте.

Һүҙ һәм өн. Өн тураһында төшөнсә. Һүҙҙе әйтеү, тыңлау, тамғалау. Һүҙҙең өн моделе.
Һуҙынҡы, тартынҡы өндәр. Нәҙек, ҡалын өндәр. Яңғырау, һаңғырау тартынҡы өндәр.
Ижек. Баҫым. Һөйләү, һөйләшеү, аралашыу мәҙәниәте.
Хәреф. Хәреф - өндөң тамғаһы. Алфавит. Алфавит хәрефтәрен өйрәнеү. Уны ҡулланыу мөмкинселектәре.

Телмәр эшмәкәрлеге.

Телмәрҙе тыңлау, ишетеү, аңлау.
Кешенең өндәшеүен тыңлау, төшөнөү, ситуацияға ярашлы ҡабул итеү һәм эш итеү.
Уҡыу. Уҡыу оҫталығын шымартыу. Аңлы, шыма уҡыу. Тасуири уҡыу. Уҡыу күнекмәһен мәғлүмәт, белеем алыу сығанағы итеп ҡулланыу.
Һөйләү телмәрен белем алыу сараһы итеп ҡуллана белеү. Аралашыу оҫталығы башланғысын артабан үҫтереү.
Телмәр этикетын өйрәнеүҙе дауам итеү. Һөйләмде дөрөҫ төҙөп һөйләшеү. Һөйләмде дөрөҫ интонация менән, таҙа, дөрөҫ итеп әйтеү. Ниндәйҙер предмет,күренеш, хәл – ваҡиғаға ярашлы мәғлүмәт алыу маҡсатында һорау һөйләм төҙөргә өйрәнеү. Уны әңгәмәсегә биреп, тыңлап анализлау.

2-се класс өсөн уҡыу предметының йөкмәткеһе.

Уҡыйбыҙҙа, уйнайбыҙҙа. (8 сәғ.)

Маҡсаттар: педагогик маҡсат-ваҡиғаларға, геройҙарҙың ҡылыҡтарына шәхси баһа биреү; әҫәр тексын файҙаланып,үҙеңдең фекереңде раҫлау өсөн шарттар тыуҙырыу; әҙәбиәт аша балаларҙа әхләҡи ҡиммәттәр тәрбиәләү; уҡыусыларҙың маҡсаты-был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә тасуири яттан һөйләргә,халыҡ ижадына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Әкиәттәр донъяһында. (12 сәғ.)

Маҡсаттар:педагогик маҡсат-текстың йөкмәткеһенә таянып әңгәмә ҡороу, уҡығанды йомғаҡлау, тексҡа ҡарата дөйөмләштереүсе һорауҙар биреү өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә экиәттәрҙе тасуири уҡыу.

Шиғыр уҡыу, яттан һөйләү. (19 сәғ.)

Маҡсаттар: педагогик маҡсат тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәтте нәфис әҙәбиәт һәм фәнни-популяр текстар аша тәрбиәләү өсөн шарттар тыуҙырыу, уҡыусыларҙың маҡсаты-был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә шиғырҙы тасуири итеп яттан һөйләргә өйрәнеү, әҫәрҙең исемен, авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.

Кешеләр нисек аралаша.(13 сәғ.)
Маҡсаттар:педагогик маҡсат-тыуған ерҙәге халыҡтың дуҫ йәшәүе, бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәте менән ҡыҙыҡһыныу, өйрәнеү.
Беҙ хеҙмәтте тыуған ерҙе һөйәбеҙ.(16 сәғ.)
Маҡсат: педагогик маҡсат-Рәсәйгә , Башҡортостанға һөйөү , уның үткәне һәм бөгонгөһөнә ҡыҙыҡһыныу, Тыуған илгә хеҙмәт итергә әҙер булыр өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты-ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә үҙеңде йәмғиәттең, халыҡтың, илдең, дәүләттең ағзаһы итеп тойоу, илдең бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплылыҡ тойғоһо кисереү.

3-сө класс өсөнуҡыу предметының йөкмәткеһе.
Белем байрамы. (1 сәғ.)
Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар ( 5 сәғ.)
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- тасуири уҡыу күнекмәһе булдырыу өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үзләштереү һөҙөмтәһендә әҫәрҙе тасуири уҡыу күнекмәһенә эйә булыу, уҡылған әҫәрҙең төп йөкмәткеһен һөйләргә һәм авторын билдәләргә өйрәнеү.
«Көҙҡояшы йөҙә зәңгәр күктә…» (6 сәғ.)
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәтте нәфис әҙәбиәт һәм фәнни – популяр текстар аша тәрбиәләү өсөн шарттар тыуҙырыу, уҡыусыларҙың маҡсаты- был модулде үҙләштереүһөҙөмтәһендә шиғырҙы тасуири итеп яттан һөйләргә өйрәнеү, әҫәрҙең исемен, авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.
Әҙәп төбө- матур ғәҙәт.(15 сәғ.)
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- ваҡиғаларға, геройҙарҙың ҡылыҡтарына шәһси баһа биреү; әҫәр тексын файҙаланып, үҙеңдең фекереңде раҫлау өсөн шарттар тыуҙырыу; әҙәбиәт аша балаларҙа әхлаҡи ҡиммәттәр тәрбиәләү; уҡыусыларҙың маҡсаты- был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә шиғырҙы тасуири итеп яттан һөйләргә өйрәнеү, әҫәрҙең исемен, авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.
«Тәңкә- тәңкә ҡарҙар яуа…» (5 сәғ.)
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- балаларҙы һүҙ сәнғәтенә ылыҡтырыу, әҙәби- теоретик төшөнсәләр менән әҫәрҙәрҙе анализлау аша практик таныштырыу өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә текстың исеме, иллюстрациялар менән эшләү, мәғәнәһен асыу, рәссамдың текстҡа төшөргән һүрәте менән үҙҙәренең күҙаллауҙарын өйрәнеү.

Йортом, илем, халҡым, киләсәгем. (15 сәғ.)
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- Рәсәйгә, Башҡортостанға һөйөү, уның үткәне һәм бөгөнгөһөнә ҡыҙыҡһыныу, Тыуған илгә хеҙмәт итергә әҙер булыр өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә үҙеңде йәмғиәттең, халыҡтың , илдең, дәүләттең ағзаһы итеп тойоу, илдең бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплылыҡтойғоһо кисереү.
Әкиәт уҡырға яратам. ( 15 сәғ.)
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- текстың йөкмәткеһенә таяныр әңгәмә ҡороу, уҡығанды йомғаҡлау, тексҡа ҡарата дөйөмләштереүсе һорауҙар биреү өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә экиәттәрҙе тасуири уҡыу, өҙөктәрен дөрөҫ интонация, темп, тон менән һөйләү.
«Илде иңләп, йәмле яҙ килә…» ( 6 сәғ.)
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙарҙы, йәнләндереүҙәрҙе, эпитеттарҙы күрә белеү өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә тексты өлөштәргә үҙ аллы бүлеү, исем ҡушыу, тотош әҫәрҙең йәки һәр өлөштөң төп фекерен билдәләргә өйрәнеү.
Предметтың уҡыу планындағы урыны.

4-се класс өсөн уҡыу предметының йөкмәткеһе.
Белем байрамы. Һаумы, мәктәп! (1 сәғ.)
Мәжит Ғафури. Ҡош ҡанаты менән, кеше дуҫлығы менән көслө. ( 1 сәғ.)
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- тасуири уҡыу күнекмәһе булдырыу өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә әҫәрҙе тасуири уҡыу күнекмәһенә эйә булыу, уҡылған әҫәрҙең төп йөкмәткеһен һөйләргә һәм авторын билдәләргә өйрәнеү.
Мостай Кәрим (3 сәғ.) Бала саҡ – баллы саҡ. Ил яҙмышы – ир яҙмышы. Батырҙарҙы ил онотмаҫ.
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәтте нәфис әҙәбиәт һәм фәнни – популяр текстар аша тәрбиәләү өсөн шарттар тыуҙырыу, әҫәрҙең исемен, авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.
Зәйнәб Биишева.(3 сәғ.) Тыуған яғым – гөлдәр иле. Белемле кеше юғалмаҫ. Ауырға төшә дуҫлыҡ.
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- ваҡиғаларға, геройҙарҙың ҡылыҡтарына шәһси баһа биреү; әҫәр тексын файҙаланып, үҙеңдең фекереңде раҫлау өсөн шарттар тыуҙырыу; әҙәбиәт аша балаларҙа әхлаҡи ҡиммәттәр тәрбиәләү; уҡыусыларҙың маҡсаты- был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә шиғырҙы тасуири итеп яттан һөйләргә өйрәнеү, әҫәрҙең исемен, авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.

Динис Бүләков (5 сәғ.) Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә.Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленер. Ололарҙы ололау – яҡшылыҡтың билдәһе. Изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ. Ир-егеттең эсендә эйәрле ат ятыр.
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- балаларҙы һүҙ сәнғәтенә ылыҡтырыу, әҙәби- теоретик төшөнсәләр менән әҫәрҙәрҙе анализлау аша практик таныштырыу өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә текстың исеме, иллюстрациялар менән эшләү, мәғәнәһен асыу, рәссамдың тексҡа төшөргән һүрәте менән үҙҙәренең күҙаллауҙарын өйрәнеү.
Яныбай Хамматов (3 сәғ.) Батырға үлем юҡ. Халҡың өсөн йәшә, халҡың өсөн үл. Тыуған ерҙәй ер булмаҫ, тыуған илдәй ил булмаҫ.
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- Рәсәйгә, Башҡортостанға һөйөү, уның үткәне һәм бөгөнгөһөнә ҡыҙыҡһыныу, Тыуған илгә хеҙмәт итергә әҙер булыр өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә үҙенде йәмғиәттең, халыҡтың , илдең, дәүләттең ағзаһы итеп тойоу, илдең бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплылыҡтойғоһо кисереү.
Абдулхаҡ Игебаев (1 сәғ) Ерһеҙ кеше – илһеҙ кеше.
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- Рәсәйгә, Башҡортостанға һөйөү, уның үткәне һәм бөгөнгөһөнә ҡыҙыҡһыныу, Тыуған илгә хеҙмәт итергә әҙер булыр өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә үҙенде йәмғиәттең, халыҡтың , илдең, дәүләттең ағзаһы итеп тойоу, илдең бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплылыҡтойғоһо кисереү.
Ноғман Мусин (4 сәғ.) Яҡшы күңелле кешеләр. Тәүәкәлләгән – таш йотҡан. Шулай ҙа була. Мөғжизәле донъя.
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- ваҡиғаларға, геройҙарҙың ҡылыҡтарына шәхси баһа биреү; әҫәр тексын файҙаланып, үҙеңдең фекереңде раҫлау өсөн шарттар тыуҙырыу; әҙәбиәт аша балаларҙа әхлаҡи ҡиммәттәр тәрбиәләү; әҫәрҙең исемен, авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.
Фәрит Иҫәнғолов (4 сәғ.) Тәбиғәткә мәрхәмәтле бул. Тәбиғәт ҡанундарын боҙоу-оло гонаһ. Башҡорт аттары. Урман дуҫтары. Кәтибә Кинйәбулатова (3 сәғ.) Сиңерткәнән ҡурҡҡан, иген икмәҫ. Бәһлеүән эше. Ҡылған эшең кешегә, килгән сауабы үҙеңә.
Сафуан Әлибай (2 сәғ.) Тыуған яҡ тәбиғәте.Тыуған илкәйем.
Фәүзиә Рәхимғолова (4 сәғ.) Йылы һүҙ – йән аҙығы. Шифалы һөт.  Ат тешенән, егет эшенән билдәле.
Факиһа Туғыҙбаева (2 сәғ.) Икмәк – өҫтәлдең йәме. Кешегә изгелекле бул.
Наил Ғәйетбай (2 сәғ.) Ҡыйыулыҡ – ярты бәхет. Эшләмәгән ашамай.

Гөлфиә Юнысова (1 сәғ.) Әсә һүҙе изге була.
Раил Байбулатов (3 сәғ.) Ҡанатлы дуҫтар ярҙам көтә. Батыр алдында юлбарыҫ та бесәй.
Рәис Ғабдрахманов (6 сәғ.) Тырышлыҡ бушҡа китмәй. Хайуандар беҙҙең дуҫтарыбыҙ. Иртә торған- бәхет ҡорған. Дуҫың булһа, үҙеңдән артыҡ булһын. Хеҙмәтеңдән изгелек.
Марс Әхмәтшин (3 сәғ.) Өс таған таймаҫ, тайһа ла аумаҫ. Изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ. Яҡшы кеше ҡайҙа булһа – яҡшы эш шунда.
Фәрзәнә Аҡбулатова (3 сәғ.) Изгелектең иртәһе-кисе юҡ. Икмәк-бөтә нәмәгә баш. Михнәт күрмәгән – рәхәттең ҡәҙерен белмәҫ.
Илдус Тимерханов (2 сәғ.) Тәбиғәткә битараф булмайыҡ. Алдар ҡуян.Сөләймән Латыпов (2 сәғ.) Тура әйткән-туғанына ярамаған. Йөрәгең ни ҡуша,шуны эшлә.
Лира Яҡшыбаева (3 сәғ.) Тәүге кисерештәр. Эт-кешенең дуҫы.
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙарҙы, йәнләндереүҙәрҙе, эпитеттарҙы күрә белеү өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә тексты өлөштәргә үҙ аллы бүлеү, исем ҡушыу, тотош әҫәрҙең йәки һәр өлөштөң төп фекерен билдәләргә өйрәнеү.Донъя әҙәбиәте (7 сәғ.) Яҡшылыҡты онотма. Йөрәгең ни ҡуша,шуны эшлә. Ололарҙы ололау – яҡшылыҡтың билдәһе. Пар аҡҡош кеүек йәшәгеҙ.
Аҡыллы кәңәш.Шатлыҡ күрһәң, шашма, ҡаза күрһәң, аҙашма.
Маҡсаттар: педагогик маҡсат- тексттың йөкмәткеһенә таянып әңгәмә ҡороу, уҡығанды йомғаҡлау, текстҡа ҡарата дөйөмләштереүсе һорауҙар биреү өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә экиәттәрҙе тасуири уҡыу, өҙөктәрен дөрөҫ интонация, темп, тон менән һөйләү.

# III. ТЕМАТИК ПЛАН

1 класс

| № hаны | Тема | Сәғәттәр |
|---|---|---|
| 1 | Грамотаға өйрәтеү. | 43 сәғ. |
| Әлифбанан hуңғы осор. | | |
| 2 | Эш бөткәс уйнарға ярай. | 6 сәғ. |
| 3 | Атай-әсәй-алтынҡанат. | 10 сәғ. |
| 4 | Үҙ илем алтын бишек. | 7 ссәғ. |
| | Бөтәhе | 66 сәғ. |

2 класс

| № hаны | Тема | Сәғәттәр |
|---|---|---|
| 1 | Уҡы, эшлә, аҡыл йый! | 4 сәғ. |
| 2 | Халҡым йыйған ынйылар | 6 сәғ. |
| 3 | Әкиәт уҡырға яратам! | 12сәғ. |
| 4 | Шып-шым булдыҡ, тынғанбыҙ, беҙ бит шиғыр тыңлайбыҙ. | 7сәғ. |
| 5 | Тәбиғәт- матурлыҡ, байлыҡ; hаҡлаhын уны бар халыҡ | 8сәғ. |
| 6 | Әҙәп төбө- матур ғәҙәт. | 15 сәғ. |
| 7 | Тыуған йортом, ерем- минең күңел нурым! | 6 сәғ. |
| 8 | Байлыҡ, муллыҡ – тормош етеш,хеҙмәттән алынған емеш. | 8 сәғ. |
| | Бөтәhе | 68 сәғәт |

3 класс

| № | Тема исеме | Сәғәт |
|---|---|---|
| 1 | Белем байрамы | 1 |
| 2 | Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар | 5 |
| 3 | «Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә…» | 6 |
| 4 | Әҙәп төбө- матур ғәҙәт. | 15 |
| 5 | «Тәңкә- тәңкә ҡарҙар яуа…» | 5 |
| 6 | Йортом, илем, халҡым, киләсәгем | 15 |
| 7 | Әкиәт уҡырға яратам | 15 |
| 8 | «Илде иңләп, йәмле яҙ килә…» | 6 |
|  | Бөтәһе | 68 |

4 класс

| № | Тема исеме | Сәғәт |
|---|---|---|
| 1 | Һаумы, мәктәп! | 1 |
| 2 | Мәжит Ғафури | 1 |
| 3 | Мостай Кәрим | 3 |
| 4 | Зәйнәб Биишева | 3 |
| 5 | Динис Бүләков | 5 |
| 6 | Яныбай Хамматов | 3 |
| 7 | Абдулхаҡ Игебаев | 1 |
| 8 | Ноғман Мусин | 4 |
| 9 | Фәрит Иҫәнғолов | 4 |
| 10 | Кәтибә Кинйәбулатова | 3 |
| 11 | Сафуан Әлибай | 2 |
| 12 | Фәүзиә Рәхимғолова | 4 |
| 13 | Факиһа Туғыҙбаева | 2 |
| 14 | Наил Ғәйетбай | 2 |
| 15 | Гөлфиә Юнысова | 1 |
| 16 | Раил Байбулатов | 3 |
| 17 | Рәис Ғабдрахманов | 6 |
| 18 | Марс Әхмәтшин | 3 |
| 19 | Фәрзәнә Аҡбулатова | 3 |
| 20 | Илдус Тимерханов | 2 |
| 21 | Сөләймән Латыпов | 2 |
| 22 | Лира Яҡшыбаева | 3 |
| 23 | Донъя әҙәбиәте | 7 |
| | Бөтәһе | 68 |